*Яппарова Л.А.*
*Ғәзизова Л.М.,*
*Стәрлетамаҡ ҡалаһы 62-се балалар баҡсаһы*

# «БАЛАНЫ ҺЫУ ҠОЙОНДОРОУ» ЙОЛАҺЫ

Маҡсат:

Балаларҙы халыҡтыңғөрөф–ғәҙәте, йолаһы менән таңыштырыу,башҡортхалыҡижадынамөхәббәттәрбиәләү, балаларҙың телмәрен үҫтереү, тыңларға өйрәтеү,балаларҙа байрам кәйефе күтәреү.

Йыһазландырыу :

Өй кәрәк-яраҡтары,һике, сәңгелдәк,тас,милликейемдәр.

Әҙерлек эше:

Шиғырҙарятлау, йырзарөйрәнеү,әкиәттәр уҡыу.

Һүҙлек эше:

Ойоҡбаш, сәңгелдәк.

Зал башҡорт халҡыныңөйөн хәтерләтә:һике, уныңөҫтөндә аҫалы балаҫ, мендәрҙәр. Түрҙәһандыҡ, һандыҡөҫтөндәөй кәрәк-яраҡтары өйөлөп ҡуйылған. Стенала сигелгәнтаҫтамалдар, ҡулъяулыҡтар,өйуртаһындасәңгелдәк,ундасабыййоҡлай. Милли кейемкейгәнҡыҙҙарһәм малайҙар залға инәләр.

Нәфис һүҙ. Ф.Рәхимғолова.

Бала тыуҙы!
Яңыйөрәктипте!
Яңышатлыҡкарттыдонъяға
Улмы?
Ҡыҙмы?
Кеше?
Уға һөйөп,
Әсәһелә, оло ил баға.

Тәрбиәсе:

Балалар, был шиғыр кем тураһында? Эйе, бала тураһында. Иғтибаритегеҙ, беҙһеҙҙеңменәнауылөйөнә-Бәпескүреү, уныһыуҡойондороуйолаһынкүргәкилдек. Был ауылдарҙа һоҡланып ҡалған боронғо йолаларҙың береһе. Яңытыуғанбаланыкүрергә,ата-әсәһененяҡындарығынатүгел, ауылбалалары ла килә. Бәпескүрергәкеше буш ҡулменәнбармай. Балалар, әһеҙниндәйбүләктәралыпбараһығыҙ?

- Һабын, башлыҡ, таҫтамал, башалтай, күлдәк, ыштан, таҫма,ҡулъяулыҡ.

-Ә мин ҡоймаҡ бешереп алдым.

-Балалар,кунаҡҡабарғансы, иҫкә төшөрәйек әле.

1. Сәпәк-сәпәк-сәпәкәй,
   Майға бешкән әпәкәй.
   Үҙе бигерәк- бигерәк
   Алһыу битле бәпескәй.
2. Сәпәк-сәпәк-сәпәкәй
   Майға бешкән әпәкәй.

Үҙейомройомғаҡтай,
Йомшаҡҡына себештәй.

Өләсәй:Балалар, бүләктәрегеҙөсөн рәхмәт.

Тәрбиәсе:

Өләсәй, безбүләккәйырҙаалыпкилгәйнек. Бәпесяратыр, оҡшатырмыикән?

Өләсәй:  Оҡшатыр.

Йыр “Минеңкустымбәләкәй”.

Өләсәй:һайафарин, бынанисекАзаматҡыуаныпкитте.Өләсәй бәпесте һикертә.

Хәтес-тәтес-тәтес тә,
Бигерәк матур бәпес тә.
Ҡайҙа ҡуяйым икән?
Ергәһалайым микән?
Күккә сөйһәм, микән?
Ергәһалһам, ҡорт тейә,
Күккә сөйһәм, ҡош тибә,
Ҡайҙа ҡуяйым икән?
(бәпесте бейетә)

Бейеү «Парлы».

Йыр «Сәп-сәп итә”.

Өләсәй: Балалар, әйҙәгеҙ бергәләшеп сабыйҙы һыу ҡойондорайыҡ. Һеҙһыу әҙерләгеҙ,ә мин баланы әҙерләйем – сисендерәм.

(өләсәй менән балалар баланы һыу ҡойондоралар.)

Балалар:

Һыуы һарҡһын, үҙе ҡалҡһын,
Бәхетле, тәүфиҡлы булһын,
Иманлы йәндәрҙән яралған булһын,
Ата-әсәһенә шәфҡәтле булһын,
Оло-кесегә мөхәббәтле куренһен
Һыуыһарҡһын,үҙеҡалҡһын
Таҙа, көр булһын.
Мал табаторғанбулһын
Тигеҙҡанатлы булһын
Оҙон ғүмерле булһын.

Баланы бишеккәһалып,күмәкләпбишекйырын башҡаралар.

( “Йоҡларға” М.Сиражи).

-Т-с-с, Азамат йоҡланы.

-Рәхмәт, балалар, килеүегеҙгә! Бик күңеллебулды. Әйҙәгеҙ, киленемменәнейәнемһаулығынаһеҙҙе ҡоймаҡлап сәй эсерәйем.

Өләсәйбалаларғаҡоймаҡтарата.